# Үҫтереүсе уҡытыу системаһын башҡорт теле дәрестәрендә ҡулланыу

Талбазы ауылы лицейында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре аҙнаһына ике сәғәтлек, башҡорт (дәүләт) теле 2 сәғәтлек программа буйынса уҡытыла.

Төрлө милләт балаларын башҡорт теленә өйрәтеү өсөн түбәндәге маҡсаттарҙы ҡуйҙым:

уҡыусыларға башҡорт телендә иркен аралашырға, телде өйҙә, йәмғиәттә, эш процесында практик файҙаланырға өйрәтеү;

башҡорт телендә китаптар, гәзит-журналдар уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу;

халҡыбыҙҙың тарихы, мәҙәниәте менән таныштырыу;

патриотик һәм интернациональ тәрбиә биреү;

яҙыу һәм уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

Мин уҡытыуҙа Л.В.Занковтың үҫтереүсе уҡытыу системаһын ҡулланам. Был система балаларға өйрәнелгән телдә күберәк аралашырға, уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен үҫтереүгә мөмкинлек тыуҙырыуы менән отошло.

Үҫтереүсе уҡытыу системаһының төп маҡсаты - уҡыу процесында баланың үҙен - үҙе үҙгәртергә теләгән һәм үҙгәртергә һәләтле булған субьектҡа әйләнеүе, уның үҙе өйрәтеүсегә әйләнеүе өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу. Уҡытыусы - дәрестеә башынан аҙағына тиклем уҡыу эшмәкәрлеген ойоштороусы, бала үҙен үҙгәртеүгә йүнәлткән активлыҡ формаһы, уҡыу процесының субьекты. Уҡытыусы бала үҫешенең киләсәге өсөн эшләй, йәғни уҡытыу үҫештән алда бара (обучение идет впереди развития). Был системаны ҡулланғанда бөтә уҡытыусылар ҙа дәрестә эш менән мәшғүл, шул уҡ ваҡытта уларҙың уҡытыусы менән аралашыу

мөмкинлеге

лә арта, парлашып, төркөмдәргә бүленеп эшләү барышында дуҫлыҡ, ихтирам, үҙ - ара ярҙамсыллыҡ тойғолары формалаша.

Тел дәрестәрендә Башҡортостан һәм уның халҡының тарихына, йола һәм ғәрөф - ғәҙҙәттәренә, мәҙәниәтенә, тәбиғәтенә арналған темалар өҫтөнлөк итә. Һәр дәресте рух тәрбиәһе менән һуғарыу, эш алымдарын төрләндереү балаларҙың ҡыҙыҡһыныуын үҫтерә.

Дәресте бай йөкмәткеле итеп үткәреү мөһим. Башланғыс синыфтарҙа дәресте йыр менән башлау балаларға бигерәк тә оҡшай, уларға дәрт, илһам, рух өҫтәй. Улар йыр аша һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә, аңларға, хәтерҙә ҡалдырырға тиҙерәк өйрәнә. Диалог алымы, тәржемә, карточкалар өҫтөндә эш, төрлө техник саралар ҡулланыу, аудиояҙманан шиғырҙар, әкиәттәр тыңлау, һүҙлек өҫтөндә эш балаларҙы тағы ла әүҙемләштерә. Һынау, төҫтәрҙе әйтеү, һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү, төшөп ҡалған һүҙ урынына һүрәт буйынса һүҙҙәр тултырып яҙыу, уҡылған хикәйәләрҙең эстәлеге буйынса һүрәт төшөрөү, һүҙлек диктанты яҙыу, тиҙәйткестәр ятлау, йомаҡтар ҡойоу, ребустар сисеү һәм төҙөү эштәрен бигерәк тә яратып башҡаралар.

Дәресте бәйләнешле һәм йөкмәткеле итеп үткәреү өсөөн балаларҙың өй эшенә ныҡ иғтибар итергә тырышам, сөнки уҡыусы өйҙә ни тиклем үҙ аллы күп эшләһә, дәрестә шул тиклем актив ҡатнашасаҡ. Балаларҙың һорауға тулы яуап биреүҙәрен талап итәм, уҡығанда хаталарын төҙәтеп, һүҙҙәрҙе ҡабатлап матур итеп әйттерәм, үҙҙәрен һорау һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөргә өйрәтәм. Аралашыуҙа әҙәп ҡағиҙәләрен һаҡлауға, йәғни тәрбиәүи һыҙаттарға ҙур иғтибар бирәм.

Фонетика бүлегендә башҡорт теленә генә хас хәрефтәргә баҫым

яһайбыҙ. Уҡыусылар хәрефтәрҙе бүлешеп алып "яҡларға" әҙерләнә: бер-береһе менән ярышып, шул хәрефкә һүҙҙәр йыя, һүрәт төшөрә. Ошо хәрефтәрҙән генә сығып һүҙлек эше алып барыла.

Зат алмаштарын, килештәрҙе өйрәнеү, ялғауҙарҙы дөрөҫ ҡулланыу өҫтөндә лә ентекле эшләйбеҙ. Зат алмаштарын өйрәнгәндә уҡыусылар үҙҙәренең ғаилә ағзалары тураһында бик теләп һөйләйҙәр. Ҡыҙыҡһынып китеп ғаилә шәжәрәләре төҙөй башланылар.

Фразеологик берәмектәрҙе үткәәдә уҡыусылар таҡтала яҙылған һөйләмдәрҙе уҡып, руссаға тәржемә итәләр, һүҙбәйләнештәргә тарҡаталар.

1. Беҙ әсәйемдең ҡайтҡанын дүрт күҙ менән көттөк. 2. Атайым бер ваҡытта ла һүҙен елгә ташламай.

Уҡыусылар һүҙбәйләнештәрҙең мәғәнә үҙенсәлеген, уларҙың нисек аталыуын асыҡлайҙар, һығымта яһайҙар, йәғни тикшеренеү эшмәкәрлеге башҡарыла. Эҙләнеү диалогында уҡытыусы ла, уҡыусы ла тулы хоҡуҡлы ҡатнашыусы. Һәр кем үҙ уйын, баһаһын әйтә ала, үҙе риза булмаған фекерҙе тәнҡитләй һәм иҫбатлай. Был эштә уҡыусыларҙың теоретик белеме асыҡлана.

Үҫтереүсе уҡытыу системаһы буйынса үткәрелгән дәрестә яңы теманы өйрәнеү, эҙләнеү этабында төрлө типтағы эштәр тәҡдим ителә, ләкин бер эш икенсеһе менән логик бәйләнештә ҡоролорға һәм күнегеү аныҡ маҡсатлы булырға тейеш.

Дәрестең тәүге өлөшөнә уҡыу бурысын ҡуйыу, маҡсатын билдәләүгә кире әйләнеп ҡайтып, уҡыусылар менән бергә "Бөгөнгө дәрестә ниндәй

яңылыҡ менән таныштыҡ?", "Нимәләр белдек?" кеүек һорауҙар менән үҙ - үҙебеҙҙе баһалап ҡуябыҙ.

Ф.Б. Хисаметдинованың "Учим башкирский язык", Х. А.Толомбаевтың "Тылсымлы бүләк" — ҡулланмалары, Ф.Х.Туғыҙбаеваның "Мин уҡырға яратам" - өҫтәл китабым. Дәрестәрҙә ҡулланыу өсөн техник саралар һәм башҡа төрлө дидактик саралар етерлек.

Ваҡытлы матбуғат, гәзит - журналдарҙы дәрестә киң ҡулланабыҙ. Бергәләп уҡыйбыҙ, темаларға бүлеп, айырым папкаларға тултырабыҙ. Уҡыусылар бер - береһе менән ярышып көләмәстәр, тәржемәле һүрәттәр йыялар, тәнәфестә төрлө һүҙлектәр ҡулланып, бергәләшеп кроссворд, сканворд, ребустар сисәбеҙ.

Уҡыусының предметҡа мөнәсәбәте унын шәхесен ихтирам итеү, мөмкинлектәренә ышанып, уңыштарға дәртләндереү, маҡтау, ҡанатландырыу аша формалаша. Балаларыбыҙҙа милли рух, милли ғорурлыҡ тәрбиәләү, телебеҙҙе башҡа милләт кешеләре лә өйрәнһен, ятраһын өсөн тейешле шарттар тыуҙырырға, көсөбөҙҙө ҡыҙыҡмай, тырышып эшләргә генә кәрәк.

Уҡыусыларымдың шат, көләс йөҙҙәрен күреү - минең өсөн иң ҙур бәхет.

Башҡортостан республикаһы
Ауырғазы районы муниципаль районының
муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһы Талбазы ауылы Лицейы

Башҡорт теле дәрестәрендә үҫтереүсе уҡыу алымдарын ҡулланыу